# “Яҙмыш кеүек, Ватан берәү...”

*Людмила* **ТАТЬЯНИЧЕВА,**
*рус совет шағирәһе*

## ВАТАН БЕРӘҮ...

Юҡ, әйтмәйем,
Ал да гөл генә тип,
Беҙҙең тормош,
Беҙҙең был донъя.
Ләкин тыуған ерҙән
Ваз кискәнде
Аңлай алмам
Ғүмер буйына.

Ҡайһы саҡта ул ҡырыҫ та була,
Ҡыуан еле менән көйҙөрә.
Ләкин, яҙмыш кеүек,
Ватан берәү
Һәм бер тапҡыр ғына бирелә.

*Турсынхан* **АБДРАХМАНОВА,**
*ҡаҙаҡ шағирәһе*

## УЙЛАНЫУ

Матур кейенеүҙән генә аҡыл артмай,
Саф күңелдә бер ҡасан да бысраҡ ятмай.
Күпме тырыш — әммә кейем ҡаплай алмай,
Әгәр кеше була икән буш ҡыуыҡтай.

Был донъяла ҡабатланмай шул бер ни ҙә,
Йәшлегең дә үтеп китер бик тиҙ генә.
Һаҡлап кейгән иң ҡәҙерле кейем туҙа, —
Һүҙҙәремә ҡолаҡ һалсы бер аҙ ғына.

Илһам биргән, һоҡланырлыҡ оло бәхет —
Юлдашы тик ҙур йөрәкле кешеләрҙең.
Ундайҙарҙы һындыралмай ауырлыҡтар,
Юя алмай хатта үлем дә эҙҙәрен.

***Майрамкан АБЫЛҠАСИМОВА,***
***ҡырғыҙ шағирәһе***

## СӘСКӘГӘ БАЙ БЫЛ ЯҘ!

Ҡайһылай ҙа сәскәгә бай был яҙ!
Балҡып тора алы, һарыһы!
Үләне лә шундай күпереп үҫкән,
Буш үтмәгән яҙҙың ямғыры.

Күңелемә ҡабат рух өҫтәй яҙ,
Гөл шәлкемен ҡосоп сабайым.
Тағы, тағы килде мөхәббәтем,
Ошо хаҡта йырҙар яҙайым!

Ташып тора шуға ҡайнар шатлыҡ,
Шишмәләрҙән һыуҙар эсәйем.
Тағы ғишыҡ уттарында янып,
Һөйөү ялҡындарын кисәйем.

Үләндәрҙә тамсы емелдәүе,
Саф йылмайыу һәр кем йөҙөндә,
Донъя бөгөн генә яралғандай,
Күпме яҡтылыҡ бар үҙендә!

Матур быйылғы йыл.
Арғымаҡҡа
Эйәр һалды күпме егеттәр!
Буйға тартҡан анау ҡайындарҙан
Яһалырҙар матур бишектәр.

***ЗӨЛФИӘ,***
***үзбәк шағирәһе***

## ТЕҮӘЛ БУЛДЫ ТОРМОШОМ

Был тормошта бары ярты көскә
Йәшәмәнем — шуны төшөндөм.
Бәхет килһә — бар күңелдән көлдөм,
Бар күңелдән һөйҙөм, һөйөлдөм.

Ситсананмы кейҙем, ебәктәнме, —
Барыбер булды, юҡҡа көймәнем.
Ә юғалтҡас тиңһеҙ һөйөүемде,
Йырҙарымдан дауа эҙләнем.

Хәтирәләр битен аҡтарғанда,
Һис рәнйемәҫ миңә йыр-ҡошом.
Юғалтыуҙар һәм еңеүҙәр булды,
Ҡайғы, шатлыҡтар ҙа ҡатар килде,
Теүәл булды һәр саҡ тормошом.

***Сароджини НАЙДУ,***
***һинд шағирәһе***
***(1879—1949)***

## КӨЙҺӨҘЛӨК

Бармаҡ остарыңа алдың ләлә сәскәһен,
Иркәләнеләр уны ирендәрең;
Төшөрөп ебәрҙең дә — эйелмәнең,
Аһ, ул йөрәгем ине минең.

Бармаҡ остарында сағыу бокал нурлана,
Затлы шарап унда ҡайнай, күбекләнә,
Һаҡһыҙ ваттың — килде бокал селпәрәмә,
Аһ, ул бәхетем ине минең.

***Гөлрухсор САФИЕВА,***
***тажик шағирәһе***

## МОҢ

Сеү, тыңлағыҙ әле...
Чанга моңо...
Шымығыҙсы, дуҫтар, бер аҙға.
Йәнгә шундай яҡын туған моңдар
Килде икән бында ҡайҙарҙан?

Бер аҙға мин айырылам һеҙҙән,
Тыңлап сихри шишмә тауышын,
Тыуған Янч һуҡмағына ҡайтһам,
Еңеләйер, бәлки, һағышым.

Күгәрсендәр менән серләшермен,
Һәм бағырмын тыуған күгемә.
Шишмәләрҙән һыуҙар һирпеп эсһәм,
Көс алырмын тағы үҙемә.

...Ә моң алыҫлашып юҡҡа сыҡты,
Тик йөрәктә эҙһеҙ ҡалманы, —
Күңелемде мәңге юйылмаҫлыҡ
Сихри хистәр менән ялманы.

***Юлия ДРУНИНА,***
***рус совет шағирәһе***

* * *

Фашистарҙан яңы азат иткән
Ауыл ситендәге һарайҙа
Санитарка саҡ-саҡ шыбырланы:
“Аһ, үләһе килмәй, малайҙар!”

Янындағы һалдат иптәштәре
Ҡыя алмай уға ҡарарға,
Ҡыҙға әле бары ун һигеҙ йәш,
Үлем керә бына араға.

Күп йылдарҙан һуң да түшәгендә
Тыныс йоҡлай алмай ҡарт һалдат,
Үткәндәрҙең әсе хәтирәһе
Һиҫкәндерә уны мең ҡабат.

Көтмәгәндә әгәр сәйер генә
Ҡапыл тәмәкегә тотонһа,
Ҡалдырығыҙ уның бер яңғыҙын,
Ул — ҡырҡ берҙең хәтәр утында.

Күрә һалдат: ауыл ситендәге
Ярым емерелгән һарайҙа
Һүнеп барған йәп-йәш ҡыҙ шыбырлай:
“Аһ, үләһе килмәй, малайҙар!”

* * *

Шинелемде һаҡлай алманым мин,
Пальто тектем унан үҙемә,
Ауыр ине йылдар,
Онотаһы килде
Һуғыш мәхшәрҙәрен тиҙерәк.

Пальто туҙҙы,
Мин ҡыҙыма бирҙем
Күптән пилоткамдың йондоҙон,
Тик, 41-ҙәге кеүек,
Был йөрәгем әгәр кәрәк булһа,
Етә, илем, бары бер һүҙең.



***ЛИ-ЦИН-ЧЖАО,***
***ҡытай шағирәһе***
***(1081—1140)***

Көҙгө бәшмәкте аңҡыта
Урман эсе.
Инде юғалған лотостың
Нескә еҫе.

Иңемдәге затлы ебәк
Миңә ниңә?
Алып китһен мине йыраҡ
Еңел кәмә.

Осоп киткән ҡыр ҡаҙындай
Сәләм-хатым.
Гүйә, уны тауҙар аша
Мин оҙаттым.

Ҡайһы яҡҡа осор икән
Ул ҡыр ҡаҙы?
Өҙөлөп көткән яуап хаты
Ҡилер тағы...

Көҙгө сәскәләр ҙә инде
Ҡойолалар,
Һаман алыҫ килеш ҡала
Был аралар.

Уй-һағыштарҙан арыныу
Мөмкин түгел.
Ялмап алған ялҡындарҙан
Һыҙлай күңел.

***Раиса САРБИ,***
***сыуаш шағирәһе***

Бөтә донъям теүәл дәһә:
Бәхетем бар, һөйөү бар.
Йән атҡаным — йәнәшәмдә,
Ныҡ нигеҙле өйөм бар.

Ҡыҙымды наҙлап, иркәләп,
Ял бирәм йөрәгемә.

Арып йонсоһам, таянам
Иремдең беләгенә.

Тик ниңә йөрәк түрендә
Һулҡылдай бер йәрәхәт,
Һинең менән осрашҡанда,
О, беренсе мөхәббәт...

*Әнисә ТАҺИРОВА тәржемәһе.*